# Ғәли Соҡорой (1826—1889) - (Мәхәммәтғәли Ғәбделсалих улы Кейеков)



- Ғәли Соҡорой (1826—1889) - (Мәхәммәтғәли Ғәбдессалих улы Кейеков)— башҡорт шағиры, мәғрифәтсеһе. 1826 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйөҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Тәтешле районы) Иҫке Соҡор ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Уның ҡартатаһы Кейек старшина Ҡара Табын башҡорт ырыуында иң атаҡлы кешеләрҙең береһе булған.

# Ғ.Соҡорой шәжәрәһе



- Мөхәммәтғәли үҙ тыуған ауылы, яҡын тирәләге һәм алыҫыраҡ мәҙрәсәләрҙә 22 йәшенә тиклем һабаҡ алған, дин ғилемен ныҡлы үҙләштергән. Китер булдым сығып илдән уҡырға, Ғилем эҫтәп ҡайтайым тип Соҡорға, — тип яҙа ул автобиографик бер шиғырында.

- Бер аҙ ваҡыт Көньяҡ Урал, ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡытып йөрөгәндән һуң 1849 йылда Стәрлебаш мәҙрәсәһенә килә һәм бер ни тиклем белемен камиллаштырып, үҙе шунда шәкерттәргә дәрес бирә башлай. Мәҙрәсәлә уҡытҡан шағир Шәмсетдин Зәки менән дуҫлаша, унан шиғриәт серҙәренә өйрәнә.

- Шулай ғилем эҫтәп, шәкерттәр уҡытып, ниһайәт, 1852 йылда тыуған ауылына әйләнеп ҡайта һәм ғүмеренең аҙағынаса шунда йәшәп, крәҫтиән эше менән шөғөлләнеп, балалар уҡытып ғүмер һөрә.

- Ғәли Соҡорой тыуған ауылында ғаилә ҡороп, 3 ҡыҙ, 5 ул тәрбиәләп үҫтерә, мәҙрәсә һабаҡтарын бирә. Һәр берeһe башлы-күҙле булып, ғаилә ҡороп йәшәп китә. Ғатаулла, Ғиниәтулла, Ғарифулла исемле улдары, ата юлын ҡыуып, заманының уҡымышлы кешеләре булып танылa.

- Ғарифуллаһы әҙип буларак та шөһрәт ҡаҙана. «Беҙ урман башҡорто булабыҙ. Урман әрсеп, бесәнлек вә игенлек яһап, бар ваҡытымды һәм көсөмдө шул шөғөлдәргә сарыф ҡылдым, — тип яҙа Ғәли Соҡорой. — Мәсет һәм мәҙрәсә араһында хеҙмәт итеп ирәкте башҡортоноң иң ғәли миннәтле заты булып торамын».

- Шулай ауылда донъя көтөү, мәҙрәсә, хужалыҡ эштәре араһында ғилем, шиғриәт менән шөғөлләнергә лә форсатын таба ул. Шағирҙың ундан артыҡ китабы донъя күрә. Улар иҫәбендә түбәндәге шиғыр йыйынтыҡтары бар: «Дөрри Ғәли» («Ғәлиҙең ынйылары»,) «Шәмғ әз-зия» («Шәм яҡтыһы»), «Зәмми нәзир» («Оҡшашты өҫтәү»), «Мәҙхе Ҡаҙан» («Ҡаҙанды маҡтау»), «Тәх-рибә, рамаҙан!» («Хуш киләһең, рамаҙан айы!») һ.б



Инеш
Автор
Тарихы
Алфавит
Ғәли Соҡорой
Шиғырҙары
Музейында
Аудио-видео материалдар
Ҡулланылған материалдар

## Ырыуым тарихы

*.. .Ете йөҙ йыл ҡәҙәр былар*
*Ирәкте фаруғы булғандар,*
*Халҡы ла шәйлә булғандар*
*Кусеп-ҡунып йөрөр, сарпай.*
*Оран да ки йәнә лә былар.*
*Дәхи Ҡайпан илә Таҙҙар*
*Араһында һөрөп саздар,*
*Мәҡәм иткән былар, сарпай...*
*Йорт-ил һалып, биләп йорттар,*
*Миәс буйында башҡорттар,*
*Беҙгә ансаб булыр улар*
*Ҡара Табын булған, сарпай...*
*Ҡара Табын тигән заттар,*
*Ни ерҙә тотһа ла йорттар,*
*Был Апмал бей берлән заттар,*
*Ҡауышыр, бер булыр, сарпай...*
*Ике ерҙә көтөргә йорт*
*Табалмай форсат башҡорт...*
*Ҡарындашлыҡ ҡаты беҙҙә*
*Шәриғәт хөрмәте берлә,*
*Пәйғәмбәр өммәте берлә*
*Барыбыҙ бер туған, сарпай...*
/Отрывок из поэтического шежере

MyShared



Инеш

Автор

Тарихы

Алфавит

Ғәли Соҡорой

Шиғырҙары

Музейында

Аудио-видео материалдар

Ҡулланылған материалдар

Иң әүәл остаҙым ата-анамдыр,
Уларға ихлас илә суҡ доғамдыр.
Мәҙрәсәгә ебәрҙеләр һәм улар,
Һигеҙ йәштәр ҡәҙәр булған замандар.
Ҡыш булһа, барыр инем мәктәпкә һәм,
Йәй булһа, ҡайтыр инем кәсепкә һәм.
Ил ашлыҡ тырмаһына ҡайтыр инем,
Тамам йәй, көҙ өйҙә ятыр инем...
Барып торҙом Йөгәмештә ике ҡыш,
Ғәрәп, фарсы китаптарын уҡып хуш...
Ебәрҙеләр Ҡаҙансыға ике ҡыш,
Уҡыр инем, яҙыр инем дәхи хуш...
Ун икенсе йәшемдә һәм Борайға
Барып торҙом, бойҙай эҫтәп бер айға...
Ун өсөнсө йәшемдә Ғәйнәгә һәм
Сәфәр ҡылдым фәнүне күрмәгә һәм.
Нәху мифтахтары (тел асҡыстары) унда күрелде,
Булып тәлмиҙ (шәкерт) ете йылдар йөрөлдө...
Китер булым сығып илдән уҡырға,
Ғилем эҫтәп ҡайтайым, тип Соҡорға

ДАУАМЫ...

MyShared

# Ғ.Соҡорой музейы





Инеш

Автор

Тарихы

Алфавит

Ғәли Соҡорой

Шиғырҙары

Музейында

Аудио-видео материалдар

Ҡулланылған материалдар









MyShared

ДАУАМЫ…



- «Был шәхестәр – беҙҙең ҡан, беҙҙең тарих, беҙҙең дан!»